# ИҒТИБАРҒА ЛАЙЫҠ ТӘҠДИМДӘР

*15 февралдә Өфө эластомер материалдар һәм конструкциялар заводы (УЗЭМиК) мәҙәниәт һарайында Өфө калаһының Совет районы башкорттары королтайы уҙғарылды. Йыйынды район королтайы Башкарма комитеты рәйесе, район хакимиәте башлығы* ***Рәмил Дилмөхәмәтов*** *асты. Ҡатнашыусыларҙың кайһы берҙәре рус телендә сығыш яһаһа ла, королтай башкорт телендә алып барылды — Өфө мегаполисы шарттарында был факттың да ыңғай үҙгәрештәр күрһәткесе булыуы аңлашылалыр. Ҡоролтай эшендә Башкортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының социаль-гуманитар бүлеге мөдире* ***Буранбай Күсәбаев****, Бөтә донъя башкорттары королтайы Башкарма комитеты рәйесе* ***Нияз Мәжитов*** *катнашты.*

**Р.Х. Дилмөхәмәтов сығышында райондың социаль-иҡтисади хәле, башҡорт телен һәм мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү проблемалары тураһында түбәндәгеләрҙе әйтеп үтте:**

— ...I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуңғы осорҙа районыбыҙҙа ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә башланы. Башҡортостан Республикаһы Президентының «Башҡортостан халыҡтарының милли-мәҙәни үҫеше буйынса республика программалары тураһында» Указына ярашлы, ижади коллективтар, мәҙәниәт учреждениелары яңы йүнәлеш алды. Халыҡ мәғарифы өлкәһе бик уңышлы эш өлгөләре күрһәтә. Мәктәптәрҙә уҡыған балаларҙың 15 проценты — башҡорттар. Башҡорт теле туған тел һәм дәүләт теле сифатында өйрәтелә. Әлегә башҡорт балаларының 37,4 проценты ғына мәктәптә үҙ телен өйрәнә ала. Районда 20-се һанлы мәктәп һәр саҡ иғтибар үҙәгендә. «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законды ғәмәлгә индереү буйынса эш башланды. Этикетка продукцияһы, тауар ярлыҡтары башҡорт телен, дәүләт символикаһын ҡулланып сығарыла, урамдарҙағы информация материалы, вывескалар ике телдә башҡарыла. Телдәр тураһындағы законды реализациялау уңышлы бара тиергә мөмкин.

Районда милли традицияларҙы тергеҙеү буйынса ла ҙур эш башҡарыла. Ҡорбан ғәйете, Һабантуй кеүек байрамдар матур йола булараҡ нығынды. Яңы байрамдар ҙа популярлаша, уларға балаларҙың ылығыуы ҡыуандыра. Мәҫәлән, «Урал батыр» эпосына арналған сәсәндәр конкурсында 20-се һанлы гимназия һәм 44-се һанлы урта мәктәп уҡыусылары призер булды. Традицияларҙы тергеҙеүҙә Баймаҡ районының Темәс мәктәбе коллективы беҙгә ҙур ярҙам күрһәтә. Темәс ауылы хакимиәте башлығы Рауил Хөрмәт улы Йәнсурин беҙҙең ҡоролтай эшендә лә ҡатнаша — беҙ уға эшлекле, ижади бәйләнештәр урынлаштырыуы өсөн рәхмәт белдерәбеҙ.

Район педагогтары уҡытыу эштәре менән генә сикләнмәй һәм фәнни-методик эҙләнеүҙәр менән дә шөғөлләнә. Ҡала шарттарында башҡорт телен уҡытыу, башҡорт милли музыкаһын пропагандалау өлкәләрендәге тәжрибә бай. 20-се һанлы гимназия, 8-се һанлы урта мәктәп, 8-се һәм 4-се һанлы балалар музыка мәктәптәре, 107-се һанлы лицей коллективтары ошо эшкә ҙур өлөш индерә. Мәҫәлән, 4-се һанлы мәктәптә республикалағы берҙән-бер балалар симфоник оркестры эшләй. Ошо уҡ мәктәптә ҡурай, ҡумыҙ кеүек башҡорт милли музыка ҡоралдарын етештереү буй-

ынса оҫтахана ла асылды, балалар ул инструменттарҙа уйнарға өйрәнә. Район талантарға бай. Башҡорт сәнғәтен А.Аҡсурин етәкселегендәге «Аҡсуран» вокаль студияһы, Б.Мырҙабулатов етәкселегендәге ҡурайсылар ансамбле айырыуса әүҙем пропагандалай.

Совет районында торлаҡ төҙөлөшө 2001-2005 йылдарға иҫәпләнгән перспектив план нигеҙендә алып барыла. Ул планда ҡаралғандан күберәк төҙөһәк тә, торлаҡҡа сиратта тороусылар һаны ҙур. Ошо категорияға байтаҡ йәш белгестәр, башҡорт теле уҡытыусылары ла ҡарай. Ҡағиҙә буларaҡ, ул йәштәр — ауылдарҙан сыҡҡан башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары. Әлбиттә, Өфөлә уларҙың бер ниндәй ҙә торлағы юҡ. Хәҙер хатта льготалы исемлеккә индерелгәндәр фатирҙы тиҫтәләрсә йылдар көтөп ала. Минеңсә, был проблеманы хәл итеү өсөн махсус торлаҡ фонды булдырырға кәрәк.

II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына тиклем ваҡыт күп ҡалманы, ә эшләйһе эштәр байтаҡ. Беҙ ситтән генә күҙәтеп, тел, мәҙәниәт менән бәйле мәсьәләләрҙе республика етәкселеге, министрлыҡтар һәм ведомстволар ҡасан хәл итә тип көтөп ултыра алмаясаҡбыҙ. Бөтәгеҙҙе лә етди эшкә ҡушылырға саҡырам...

**Район башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, 8-се һанлы урта мәктәп директоры Илдар Әҙеһәм улы Зөлҡәрнәйев:**

— ...Әле бынан ике-өс йыл ғына элек мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу буйынса беҙҙең Совет районы башҡаларҙан һис айырылмай ине. Һуңғы ваҡытта хәл үҙгәрҙе. Яңыраҡ республикабыҙ парламенты тарафынан ойошторолған тикшереү район эшен юғары баһалап, өлгө тип күрһәтте. Әлеге көндә 20-се гимназияла, ике башланғыс мәктәптә уҡытыу тулыһынса башҡорт телендә алып барыла. Быны еңеү тип баһаларға кәрәк, һәм унда ҡоролтайҙың роле ҙур. Районда кадрҙар менән эштәр ҙә уңышлы бара. Ике ҡоролтай араһында, күреүебеҙсә, байтаҡ эштәр башҡарылған, һөҙөмтәләр ҙә күҙгә күренерлек. Әммә хәл итәһе проблемалар ҙа күп. Өлкән синыфтар өсөн дәреслектәр етешмәй, башҡорт теле буйынса таблицалар юҡ тиерлек. Таблицаларҙы уҡытыусылар үҙҙәре эшләргә мәжбүр. Китапханаларҙа башҡорт китаптары бик аҙ, уларға журналдарға яҙылыу өсөн дә аҡса бик аҙ бүленә. Райондағы 21 мәктәптең 16-һында ғына башҡорт теле кабинеты асылған, ләкин улар ҙа заманса йыһазландырылмаған. Ә иң мөһиме — ошо башланғыстарҙың инициаторы булған энтузиастарҙың, белгестәрҙең ауыр матди хәле. Ҡоролтай иғтибарына уларҙың фатир мәсьәләһен генә еткерәм. Беҙҙә 54 башҡорт теле уҡытыусыһы, 26 Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте уҡытыусыһы эшләй. Шуларҙың 10-һы ғына үҙ фатирында йәшәй, уларь ла пенсия йәшенә яҡынлашҡандар. 11 уҡытыусы инде күп йылдар фатирға түләп тора, ҡалғандары, йәғни күпселеге, — ятаҡтарҙа. Артабан былай эш бармаясаҡ. Йәшәр урыны булмаған белгестән эшкә бөтә күңелен һалыуын талап итеп, бөтә мөмкинселектәрен асып эшләр тип көтөп булмай. Бөгөнгө көндә нәҡ ошо проблема беҙҙең өсөн иң беренсе планда тора. Ҡоролтай өсөн дә ул иң мөһим проблемаларҙың береһе булырға тейеш...

Аҙаҡ Совет районы башҡорттары ҡоролтайы резолюция ҡабул итте һәм II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайланы. Резолюцияла бик мөһим пункттар ҙа бар. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законын «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законға тап килтереү тәҡдиме менән Дәүләт Йыйылышына мөрәжәғәт итеү мәсьәләһен ҡуйған пункт иғтибарға лайыҡ.

*Гөлсәсәк Әлибаева һәм Закир Шакиров әҙерләне.*